**ТЕЛГӘ ЗАРЯДКА йәки ТЕЛ ӨСӨН КҮНЕГЕҮҘӘР**

1. **«Тел көнөн нисек башлай?»**
Тел иртән тора ла:
- тышҡа сығып кирелә;
- шунан иртәнге һыуыҡтан ҡалтырана;
- өйгә кереп йыуына;
- шунан өйөн йыйыштыра: түшәмен (аңҡауҙы) һөртә, иҙәнен йыуып ала, тәҙрәләрен (сикәләрҙе) таҙарта ;
- эше бөткәс тышҡа сығып атта йөрөй;
- тыштан ингәс сәй эсә, аыҙ ситенә буялған ҡаймағын ялап ала;
- шунан кәнфит ашай.
2. **«Ат сабышы»**
Ат сапҡан төҫлө итеп телде шартлатыу.
3. **«Кемдең теле оҙонораҡ?»**
Тел мөмкин тиклем алға таба сыға һәм 3-5 секундҡа шулай ҡатып ҡала.
4. **«Теш тәрең нисәү?»**
Тел ярҙамында тештәрҙе һанау, тәүҙә аҫҡы, шунан өҫкө.
5. **«Ябыҡ ҡапҡа»**
Ирендәр ҡымтылған. Тел көс менән тышҡа сығырға тырыша, ә ирендәр ҡаршылаша.
6. **«Ҡытыҡ килә»**
Ауыҙҙы ябып, телдең осо менән яй ғына хәрәкәттәр яһап аңҡауҙы ҡытыҡлайбыҙ.
7. **«Телде тешләү»**
Аҡрын ғына итеп телдең осон, ситтәрен тешләп сығабыҙ.
8. **«Акула тештәре»**
Тел менән тештәрҙе үткерләйбеҙ, сарлайбыҙ: ике яҡтан да аҫҡы тештәрҙе, шулай уҡ өҫкөләрен дә.
9. **«Осло ҡаҙаҡ»**
Тел көс менән сикәне тишергә тырыша, ике яғын да, алмаш-тилмәш.
10. **«Йөҙөк»**
Телдең осо аңҡау буйлап артҡа таба бара һәм түңәрәк йөҙөк барлыҡҡа килтерә.

**ФОНЕТИК ЗАРЯДКАЛАР**

1. Тамаҡты ҡарағанда доктор нимә тип әйтергә ҡуша? (А-а-а)
2. Ҡыҙ бала ҡурсаҡты нисек йоҡлата? (Аа-аа-аа)
3. Һарыҡ нисек мәьәлдәй? (Бәәә)
4. Буран нисек олой? (Ввв…)
5. Ҡаҙҙар нисек ҡаңғылдай? (Ға-ға-ға)
6. Ҡуңыҙ нисек жыулай? (Ж-ж-ж)
7. Ишәк нисек һөрәнләй? (Иа-иа-иа)
8. Ҡурҡыштан нисек ҡысҡыралар? (Ой)
9. Йырҙы һүҙһеҙ нисек йырлайҙар? (Лә-лә-лә)
10. Һыйыр нисек баҡыра? (Мөө…)
11. Атты нисек ҡыуалар? (Ноо…)
12. Себештәрҙе нисек саҡыралар? (Сип-сип)
13. Терпе ниндәй тауыш сығара? (Пыф-пыф)
14. Ҡошсоҡтар нисек сипылдай? (Пи-пи-пи)
15. Эт нисек ырылдай? (Р-р-р)
16. Ҡарғалар нисек ҡарҡылдай? (Ҡар-ҡар)
17. Атты нисек туҡталар? (Тр-р-р)
18. Тишек шарҙан һауа нисек сыға? (С-с-с)
19. Сәғәт нисек тыҡылдай? (Тик-так)
20. Тумыртҡа ағасты нисек дауалай? (Туҡ-туҡ)
21. Бүре нисек олой? (У-у-у)
22. Бесәй асыуын нисек күрһәтә? (Ф-ф-ф)
23. Йылан нисек ыҫылдай? (Ҫ-ҫ-ҫ)
24. Паровоз парын нисек сығара? (Ш-ш-ш)
25. Бал ҡорто нисек оса? (Быззз…)
26. Иртән әтәс беҙҙе нисек уята? (Ки-ки-ри-күк)
27. Себен нисек бызылдай? (Бз-з-з)
28. Бала нисек илай? (Уа-уа-уа)
29. Серәкәй нисек безелдәй? (Бзь-бзь)
30. Урман нисек шаулай? (Ш-ш-ш)

**ТЫН ЮЛДАРЫНА ГИМНАСТИКА**

1.«Водолаз» - кем оҙағыраҡ тын алмайынса тора ала?
2.«Шар тултырыу» - танауҙан үпкә тулғансы тын алабыҙ һәм көс менән ауыҙҙан сығарабыҙ.
3.«Шәм һүндереү» - танауҙан тын алабыҙ һәм аҡрын ғына ауыҙ аша сығарабыҙ.
4.«Бәпембә өрөү» - танауҙан үпкә тулғансы тын алабыҙ һәм бәпембәнең мамыҡтарын өрөп төшөрәбеҙ.
5.«Тирәк мамығы» - һауалағы мамыҡты ергә төшөрмәç өсөн йыш ҡына өрөп торабыҙ.
6.«Эçе сәй» - ҡулдарыбыҙҙа сынаяҡ менән эçе сәй, уны өрөп һыуытып эсәбеҙ.
7.«Эттәр» - сабып килгән эттәр кеүек йыш-йыш тын алабыҙ.
8.«Сәскәләр» - беҙ хуш еçле гөл-сәскәле баҡсала һәм уларһың еçтәрен ләззәтләнеп еçкәйбеҙ.
9.«Моңло өндәр» - тәрән һулайбыҙ һәм тынды сығарғанда һуҙынҡы өндәрҙе йырлап әйтәбеҙ – а, о, у, ы, ә, ө, ү, и, э.
10.«Кәмә» - күләүектәге ҡағыҙ кәмәне өрөп йөрөтәбеҙ.
11.«Ябыҡ-асыҡ» - тын алабыҙ, шунан танауҙарҙы бармаҡтар менән бер ҡыçып, бер асып һауаны сығарабыҙ.
12.«Киреһенсә эшлә» - танауҙан тын алабыҙ, ауыҙҙан сығарабыҙ, шунан киреһенсә, ауыҙҙан тын алабыҙ, танауҙан сығарабыҙ.
13.«Яра» - тәндәге яра әрнемәһен өсөн йыш-йыш өрәбеҙ.
14.«Йоҡо килә» - кем белә, беҙ йоҡо килгәндә нимә эшләйбеҙ?
15.«Берәм-һәрәм» - танау ҡыуышлығының береһен ябып тын алабыҙ, ә сығырғанда икенсеһен ябабыҙ, һәм киреһенсә

**ТЕЛ ТӨҘӘТКЕСТӘР**

Өп-өп-өп – эттәр сабыша өрөп,
Өп-өп-өп – төндәр буйына йөрөп.
Еп-еп-еп – хужаһы еткән килеп,
Еп-еп-еп – эте икәнен белеп.

Рә-рә-рә – урман буйлап йүгерә,
Ра-ра-ра – ҡулын болғап саҡыра.
Рө-рө-рө – япраҡ ярған бөрө,
Рө-рө-рө – урманда тыныс йөрө.

Са-са-са – был бит беҙҙең Миңниса,
Се-се-се – Миңниса, ярҙам итсе.
Сә-сә-сә – әсәйең шалҡан сәсә,
Се-се-се – орлоҡтарҙы бирһәңсе.

Ça-ça-ça – ҡайһылай матур баça,
Са-са-са – тыпырлап күңел аса,
Са-са-са – дәртләндерәм: «Их, ас-са!»
Са-са-са – бейей шулай башҡортса.

Та-та-та – Талип тауыҡ ашата.
Ти-ти-ти – саҡыра, ти-ти-ти.
Тә-тә-тә – күршенекен өркөтә,
Ти-ти-ти – йөрөмә бында, кит, ти.
Ты-ты-ты – күрше тауығы ҡурҡты,
Тө-тө-тө – кәртәнән осоп төштө.
Те-те-те – Талип тағы ем һипте,
Тө-тө-тө – Талиптың еме бөттө.

Уа-уа-уа – хуш еç бөркә яҙын һауа,
Уы-уы-уы – татлы шул шишмә һыуы.
Уа-уа-уа – үҙе инде бер дауа,
Уы-уы-уы – ялан буйлап атлауы.

Фа-фа-фа – тырышып яҙа Сафа,
Фе-фе-фе – кәкре-бөкрө хәрефе.
Фа-фа-фа – матур яҙыу бер яфа.

Ҫа-ҫа-ҫа – ручканы ул баҫа,
Са-са-са – хәрефтәр унан ҡаса,
Фа-фа-фа – һаман тырыша Сафа.
Фе-фе-фе – матур сыҡты хәрефе,
Фе-фе-фе – күтәрелде кәйефе.

Һең-һең-һең – ҡайҙан ҡайтып киләһең?
Һаң-һаң-һаң – ял итеп ал арыһаң.
Һәң-һәң-һәң – дәртле баҫып йөрөһәң,
Һәң-һәң-һәң – бөтә эшкә өлгөрһәң,
Һең-һең-һең – моратыңа етерһең.

Һы-һы-һы – был Һиҙиәт ҡустыһы,
Һе-һе-һе – кемдеке һуң бирәүһе?
Һен-һен-һен – танып алдым икәүһен,
Һөн-һөн-һөн – саҡырығыҙ өсөһөн,
Һе-һе-һе – нисә булды бөтәһе?

Ша-ша-ша – Шакир шарға талаша,
Шы-шы-шы – ҡыҙыу уйын барышы.
Шә-шә-шә – малайҙар шар бәрешә,
Ше-ше-ше – уйнай ала һәр кеше.

Ыж-ыж-ыж – һыуыҡ әйтә: «Ыж-ыж-ыж»,
Аж-аж-аж – йүгереп йөрө, Ғилаж.
Жыу-жыу-жыу – елдәр әйтә: «Жыу-жыу-жыу»,
Шыу-шыу-шыу - Ғилаж, тауҙан шыу ҙа шыу.